## Быйыл да беҙҙе матур саралар көтә

**1-се балалар музыка мәктәбендә Стәрлетамаҡ мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәренең кәңәшмәһе үтте.**

Уны ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Т.Ш.Мырҙағәлин алып барҙы. Төп доклад менән ҡала мәҙәниәт бүлеге начальнигы З.С.Зиннәтуллин сығыш яһаны. Ул, 2015 йылға эш йомғаҡтарына байҡау яһап, мәҙәниәт өлкәһендә башҡарылған бихисап эштәрҙе билдәләп үтте.

Әҙәбиәт йылы республика һәм ҡала күләмендә уҙғарылған ҡыҙыҡлы саралары менән хәтерҙә уйылып ҡалды, тине докладсы. Зәфәр Сәғәтдин улы билдәләүенсә, мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларының матди-техник базаһын нығытыуҙа байтаҡ эштәр эшләнгән, "2014 – 2016 йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһында мәҙәниәт үсеше" муниципаль программаһы уңышлы үтәлгән. Ҡалала 1820 сара уҙғарылған һәм уларға 72 мең самаһы кеше йөрөгән. "Китапханалар төнө – 2015" Бөтә Рәсәй китап уҡыусыларға ярҙам, "Сәнғәт төнө – 2015" Бөтә Рәсәй мәҙәни белем биреү акциялары, «Виват, әҙәбит!» ҡала әҙәби фестивале, "Уҡыусы ҡала" библиомарафоны иң сағыу тамашалар булып хәтерҙә ҡалды.

Шулай уҡ мәҙәниәт бүлеге ике мөһим проект ойошторған: Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата оло байрам саралары һәм Стәрлетамаҡтың 250 йыллығы уңайынан һәйкәлдәр симпозиумы. Октябрь проспектындағы аллеяла ун мәрмәр һын урынлаштырылыуы, Стәрлетамаҡта беренсе тапҡыр асыҡ һауала классик музыка марафоны уҙғарылыуы ла маҡтаулы эштәр рәтендә.

Артабан докладсы 2016 йылға төп бурыстар менән таныштырҙы. Быйыл да ижади эштә төп йүнәлештәрҙең береһе булып ҡалабыҙҙа йәшәүсе халыҡтарҙың мәҙәни мираҫын үстереү, Рәсәйҙә иғлан ителгән Кино йылын һәм, әлбиттә, Стәрлетамаҡтың 250 йыллыҡ юбилейын лайыҡлы уҙғарыу тора, тине Зәфәр Сәғәтдин улы һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең төп бурысы булған юбилей сараларына әҙерлек эштәре менән таныштырҙы.

Әлеге көндә ҡала юбилейын уҙғарыуҙың төп концепцияһы раҫланған. Ойоштороусыларҙың уйынса, юбилей сараларына барлыҡ ҡала халҡы йәлеп ителәсәк. Иҫке ҡала биҫтәһендә Стәрлетамаҡҡа нигеҙ һалыныуға һәм Тоҙ пристане төҙөлөүгә арналған майҙансыҡтар булдырыласаҡ тип күҙаллана.

Стәрле йылғаһы ярында Башҡортостан халыҡтарының мәҙәни һәм сәнғәт ҡомартҡыларын күрһәтеүсе күргәҙмәләр урынлаштырыласаҡ.

Шулай уҡ проспекттарҙа һәм Хоҙайбирҙин урамында ла төрлө тематик майҙансыҡтар булдырыласаҡ. Шул иҫәптән, Мәңгелек ут һәйкәле янында флэш-моб уҙғарыу күҙаллана. Юбилей саралары Ҡала мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда ҙур концерт һәм фейерверк менән тамамланасаҡ.

Әйткәндәй, ултырышта РФ мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре профсоюзының БР ойошмаһы рәйесе А.В.Кузьменко ла ҡатнашты һәм залдағыларҙың һораулары яуап бирҙе.

Сара аҙағында ҡалабыҙҙа мәҙәниәт өлкәһендә уңыштарға ирешкән хеҙмәткәрҙәргә маҡтау ҡағыҙҙары, дипломдар тапшырылды һәм Ғәли Ибраһимов исемендәге ҡала премияһы лауреаттары бүләкләнде. Премияға "Үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы" муниципаль бюджет учреждениеһы директоры Ә.Р.Әсфәндиәрова һәм шағир Кәрим Булат лайыҡ булды.

**Р. САФИНА.**

***ӘЙТКӘНДӘЙ,***

**Стәрлетамаҡтың 250 йыллыҡ юбилейын байрам итеү көнө 1 октябрҙән 24 сентябргә күсерелде. Әммә йыл да уҙғарыла килгән яҙғы байрамдарҙан да баш тартмайбыҙ. Майҙың һуңғы йәкшәмбеһендә бер юлы өс әһәмиәтле ваҡиға көтә: Ҡала көнө, Химиктар көнө һәм Эшкыуарҙар көнө. Шуға күрә ҡала халҡы яҙ аҙағында ла матур күңел асып кинәнәсәк.**

# "Хәүефһеҙлек паспорты" кемгә кәрәк?

**Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәтендә терроризмға ҡаршы көрәш, оборона һәм янғын хәүефһеҙлеге, башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса комиссия ултырышы үтте. Тәү ҡарашҡа "эш мәле" булараҡ ҡына тойолған был сарала бөтә ил кимәлендәге мөһим мәсьәләләр күтәрелде.**

...Беҙ – уҡытыусы, журналист, һатыусы, водитель. Был йәһәттән төп бурысыбыҙ, әлбиттә, уҡытырға, гәзит-журнал сығарырға, йөк йәки кешеләрҙе йөрөтөргә ҡайтып ҡала. Шул уҡ ваҡытта төп эшебеҙ менән йәнәш торған башҡа бурыстар ҙа бар бит әле – хәүефһеҙлеккә ҡайғыртыу, мәҫәлән. Тик, үкенескә ҡаршы, һуңғыһына иғтибар бирергә яратмайбыҙ, икенсе планға күсерәбеҙ. Йәнәһе лә, уның өсөн "икмәк ашаған" тейешле хеҙмәттәр бар. Бик тә булмаһа, Хоҙай һаҡлар, тип өмөт итәбеҙ. Әммә Хоҙай һаҡланғанды һаҡлармын, тигән бит.

- Бөгөн халыҡтың күпләп йыйылыу урындарындағы хәүефһеҙлек хаҡында һөйләшәсәкбеҙ, "хәүефһеҙлек паспортын" әҙерләү кимәлен тикшерәсәкбеҙ, - тип эш тәртибе менән таныштырҙы ҡала хакимиәтенең беренсе урынбаҫары Марат Мусин кәңәшмәне башлап.

Асыҡлыҡ индереп үткәндә, халыҡтың күпләп йыйылыу урыны тип 50-нән ашыу кеше йыйылған урын билдәләнә. Башлыса ундай урындар сараға ҡайтып ҡала.

"Хәүефһеҙлек паспортына" килгәндә иһә, был документтың маҡсаты учреждениела теракт, тәртип боҙоу, ғәҙәттән тыш хәлдәр булған осраҡта әҙемтәне минималләштереү йәиһә ундай хәлдәрҙе бөтөнләй булдырмау күҙ уңында тотола. Документ махсус хеҙмәттәр менән бергә эшләнә. Ул ағымдағы йылдың 1 апреленә тиклем әҙерләнеп бөтөргә тейеш. Әйтергә кәрәк, был тәңгәлдән ҡалабыҙҙа, үкенескә ҡаршы, эш һүлпән бара. Улай ғына ла түгел, янғын хәүефһеҙлеген ҡайғыртыуға ҡайһы бер учреждениелар бөтөнләй яуапһыҙ ҡарай. 60-тан ашыу етешһеҙлек асыҡланған осраҡтар бар: кешеләргә запас сығыу урыны, тейешле билдәләр, янғын һүндереү ҡоралдары һ.б. Был хаҡта Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының ҡалалағы күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм иҫкәртеү эше бүлеге начальнигы урынбаҫары Ирек Ибраһимов еткерҙе. Белгес фекеренсә, ошо йәһәттән ҡалала яуаплылыҡты көсәйтеү маҡсатында пландан тыш тикшереү эштәре йәйелдереләсәк.

Уның ҡарауы, өлгө алырҙай учреждениелар ҙа юҡ түгел. Мәҫәлән, ҡала мәғариф бүлеге шундайҙар рәтендә. Әлбиттә, балаларыбыҙҙың хәүефһеҙлегенә иң тәү сиратта иғтибар үҙәгендә булырға тейештәр.

Терроризмға ҡаршы көрәш буйынса ҡалала хәл тотороҡло ҡала килә, тип билдәләнде сарала. Донъяла мөнәсәбәттәр ҡатмарлашҡан мәлдә быңдай һүҙҙәр, әлбиттә, күңелгә май булып ятты. Әммә уяу булыу бер ҡасан да артыҡ түгел. Хәйер, тотороҡлоҡтоң да нигеҙендә нәҡ тейешле хеҙмәттәрҙең эш һөҙөмтәһе, уяулыҡ ята түгелме ни?

- Бигерәк тә йәштәр менән ныҡлы эшләргә кәрәк. План өсөн үткәрелгән сараларҙа ғына сағылырға тейеш түгел был, егет-ҡыҙҙарҙа уяулыҡты көсәйтер өсөн класс сәғәттәрендә, «түңәрәк өҫтәл»дәрҙә уларҙың беҙҙең хеҙмәт вәкилдәре менән аралашыуы ҡиммәт, - тип билдәләне был йәһәттән Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәтенең Стәрлетамаҡтағы бүлек начальнигы Рушан Ҡотлояров. Рушан Наил улы йәнә бер етешһеҙлек хаҡында әйтеп үтте – биналарҙағы элекке вахтерҙар, яңы закон талаптарына ярашлы, шәхси һаҡ предприятиеһы хеҙмәткәрҙәренә әйләнде. Әммә улар һаман да башлыса документ тикшереү менән генә мәшғүл, ә хәүеф төрлә яҡлап һағалай. Атап әйткәндә, күпләп халыҡ йыйылған урындарҙа хәүефһеҙлек тейешенсә кимәлдә булырға тейеш.

Докладсыларҙың төрлө йүнәлештәге сығыштарында бер уртаҡ фекер ҙә бар: иҡтисади хәлдең тотороҡһоҙлоғона һылтанып, хәүефлегебеҙҙе тотороҡһоҙға әйләндерергә ярамай. Тейешенсә ҡоралмай, өйрәтелгән кешеләр булырға, халыҡты иҫкәртеү, бер нимәгә ҡарамай, тейешенсә кимәлдә ойошторолорға тейеш. Кире осраҡта, бер көн килеп, хәүефһеҙлек түгел, ә нәҡ уҡытыу, яҙыу һәм кешене автобуста йөрөтөү икенсе планға күсеүе ихтимал...



**Эске эштәр министрлығының Стәрлетамаҡ бүлеге вәкиле Рәмил Фәйзуллин «хәүефһеҙлек паспорты»н ваҡытында эшләргә саҡырҙы.**



**Ҡала учреждениелары вәкилдәре мәсьәләнең етдилеген аңлағандыр, тип ышанғы килә.**

**Рәмил МАНСУРОВ.**
**Эльдар ФӘТТӘХОВ фотолары.**

# Стәрлетамаҡ юбилейға әҙерләнә

250 1766-2016 СТӘРЛЕТАМАҠ

**Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе хеҙмәткәрҙәре лә 2015 йылға йомғаҡ яһаны.**

Республикалағы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе торошо менән БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының техник үҫеш һәм энергия һаҡлау бүлеге начальнигы Юрий Палтусов таныштырҙы. Әлеге ваҡытта республикалағы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ ойошмаларының 10 проценты килемһеҙ эшләй, тип билдәләне ул. Коммуналь инфраструктура объекттарына яңылыҡ индереү өсөн банктарҙан кредит алыу ҡарала. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә проблемалар етерлек. Шуларҙың иң бәкәлгә һуҡҡаны – бурыстар. Бөгөнгө көнгә идарасы компанияларҙың ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмаларға бурысы 4 млрд һумдан ашып киткән.

"БР төбәк операторы" етәксеһе Борис Герасимов 2015 йылда Стәрлетамаҡта күп фатирлы йорттарҙа яһалған капиталь ремонт эштәренә йомғаҡ яһаны. Атап әйткәндә, 110 йортҡа йәмғеһе 298 миллион һумлыҡ ремонт эшләнгән. Һыу биреү, йылылыҡ менән тәьмин итеү, лифттарҙы алыштырыу, йорт түбәләрен йүнәтеү һәм фасадтарҙы көпләү эштәре башҡарылған. Борис Павлович әйтеүенсә, Стәрлетамаҡта капиталь ремонт өсөн түләүҙәрҙе йыйыу 84 процент тәшкил итә. Был республика буйынса, дөйөм алғанда, байтаҡҡа юғары. Бынан тыш, спикер, капремонт өсөн түләүҙән бер кем дә азат ителмәй, шулай ҙа граждандарҙың ҡайһы бер категорияларҙы буйынса компенсациялар бирелә, тип белдерҙе.

Торлаҡ-коммуналь хужалығы өлкәһендәге эштәрҙең торошо тураһында ентекләберәк ҡала хакимиәте башлығының хужалыҡ мәсьәләләре буйынса урынбаҫары Ринат Дәминов һөйләне. Былтыр Ашҡаҙар һәм Ольховка йылғалары аша һалынған ике күпер йүнәтелгән. Был эштәрҙең хаҡы 27,7 млн. һумға тәшкән. Шуның 22 млн. һумы - республика бюджетынан. Үлсәү контроле майҙансыҡтарын төҙөү башланған, Совет, Мәскәү, Шота Руставели урамдарында бысраҡ һыуҙарҙы ағыҙыу торбалары ҡуйылған, Стәрлебаш трактында емтек ерләнгән мал зыяраты ремонтланған. Артём, Водолаженко, Шайморатов, Ҡара диңгеҙ урамдарында юлдар ремонтланған. 2015 йылда ҡаланы йәшелләндереү өсөн 9,5 миллион һум аҡса тотонолған. Башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә Стәрлетамаҡ "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡалаһы" федераль конкурсында 3-сө урын алды, тине ул.

Стәрлетамаҡтың олпат юбилейы айҡанлы быйыл 141 йортҡа капиталь ремонт уҙғарыласаҡ. Ҡыҫҡаһы, байрамға әҙерлек эштәре дәррәү бара.

**Р. ЗАМАНОВА.**